**1. М. Аҡмулла ниндәй шағир булараҡ билдәле?**

a. Мәғрифәтсе шағир;

b. Суфый шағир;

c. Шағир- импровизатор;

d. Шағир булмаған.

2. **«Аҡмулла – яҡтылыҡ йырсыһы» китабының авторы кем?**

a. Ғ. С. Ҡунафин;

b. **Ә. Х. Вильданов;**

c. Ә. М. Сөләймәнов;

***3. Иң әүәл кәрәк нәмә - иман, тигән,***
***Әхирәт эштәренә инан, тигән.***

**Был өҙөк М. Аҡмулланың ниндәй шиғырынан алынған?**

a. **“Нәсихәттәр”;**

b. “Инсафлыҡ”;

c. “Кәңәш”;

d. Дөрөҫ яуап юҡ.

4. **«Нәсихәттәр» шиғырында Аҡмулла нисә вәғәз бирә?**

a. 7;

b. 5;

c. 8;

d. 2.

5. **Татар реформаторы Шиһабетдин Мәржәнигә дан йырлаған әҫәре ниндәй жанрға ҡарай?**

a. Шиғыр;

b. Ҡобайыр;

c. **Мәрҫиә;**

d. Баллада.

6. **М. Аҡмулланың мәғрифәтселек ҡараштары ниндәй әҫәрендә асыҡ сағылған?**

a. **«Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!»;**

b. «Аттың ниһен маҡтайһың?..»;

c. «Бәхет»;

d. Дөрөҫ яуап юҡ.

7. **М. Аҡмулланың социаль тигеҙһеҙлекте һүрәтләгән әҫәре?**

a. “Уяныу”;

b. “Бәдбәхеткә һүҙең үтмәҫ”;

c. “Атайыма хат”;

d. Дөрөҫ яуап юҡ.

8. **М. Аҡмулла шиғыры нисә строфанан тора?**

a. 4;

b. 8;

c. 11;

d. дөрөҫ яуап юҡ.

9. **Ризаитдин Фәхретдиндың атаһының исеме нисек булған?**

a. Исмәғил;

b. Ризаитдин;

c. **Фәхретдин;**

d. Зәки.

**10. Р. Фәхретдинов дүрт - биш йәшендә кемдән хәреф танырға өйрәнә?**

a. өләсәһенән;

b. әсәһенән;

c. мулла ағаһынан;

d. атаһынын.

**11. М. Аҡмуллаға Башҡортостан халыҡ шағиры исеме нисәнсе йылда бирелгән?**

a. 1867;

b. 1892;

c. 1900;

d. **бирелмәгән.**

**12. Р. Фәхретдинов Түбән Шыршылы ауылы мәҙрәсәһендә ниндәй телдәрҙе өйрәнә?**

a. Ғәрәп, урыҫ, ҡытай;

b. Урыҫ, япон, төрөк;

c. Сыуаш,урыҫ, ғәрәп;

d. **Ғәрәп, фарсы, төрөк.**

13. **Р. Фәхретдин нисәнсе йылда, ҡайҙа вафат була?**

**a. 1936 йылда Өфөлә;**

b. 1937 йылда Мәскәүҙә;

c. 1936 йылда Ырымбурҙа;

d. 1939 йылда Өфөлә.

14. **“Ғаҡидә”, “Ғаилә”, “Нәсихәт”, “Шәкертлек әҙәбе”, “Тәрбиәле бала” һ.б. әҫәрҙәренең авторы?**

a. М. Өмөтбаев;

**b. Р. Фәхретдинов;**

c. М. Аҡмулла;

d. М. Буранғолов.

15. **Балаларҙы тәрбиәләү буйынса файҙалы кәңәштәр бирелгән, ата-әсәләрҙең бурыстары ентекле аңлатылған китабы нисек атала?**

a. “Сәлимә йәки Ғиффәт”;

b. “Әсиә йәки Ғәмәл һәм яза”;

c. “Йәдкәр”;

**d. «Нәсихәт».**

16. **«Нәсихәт» әҫәре 3 китаптан тора. Беренсеһе кемдәргә тәғәйенләнгән?**

a. ололарға;

b. **ир балаларға;**

c. ата-әсәгә;

d. ҡыҙ балаларға.

17. **Иҫкелек менән яңылыҡ, яуызлыҡ менән яҡшылыҡ, культураһыҙ һаран байҙар менән уҡымышлы йәҙитсе муллалар, ябай кешеләр араһындағы мөнәсәбәт ниндәй әҫәрҙәрендә сағыла:**

a. “Башҡорт иле хаҡында хәҡиҡәт”;

b. “Әсмә йәки Ғәмәл вә яза”;

c. “Йәдкәр”;

d. “Нәсихәт”.

**18.** **«Әсмә йәки Ғәмәл вә яза» әҫәрендәге Зәйнәптең ысын исеме?**

a. Хәмиҙә;

b. Сәлимә;

c. Зәйнүш;

d. Әсмә.

**19.** **Ризаитдин Фәхретдиновтың ҡайһы әҫәренең I-се бүлегендә Ҡазан ҡалаһының XIX быуат аҙаҡтарындағы тормошо һүрәтләнә?**

a. “Сәлисә йәки Ғиффәт”;

b. “Әсмә йәки Ғәмәл вә яза”;

c. “Ғаилә”;

d. “Мәшһүр ҡатындар”.

**20.** **«Атайыма хат» әҫәренең авторы :**

a. Зәйнулла Рәсүлев;

b. **Мифтахетдин Аҡмулла;**

c. Ризаитдин Фәхретдин;

d. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев;

**21.** **Башҡортостандың Ҡырмыҫҡалы районы Ибраһим ауылында тыуған мәғрифәтсе** :

a. **М. Өмөтбаев;**

b. Р. Фәхретдин;

c. Ғ. Соҡорой;

d. Ғ. Кейеков.

**22.** **Ырымбурҙағы Неплюев исемендәге кадет корпусында белем алыусы :**

a. **М. Өмөтбаев;**

b. Ғ. Соҡорой;

c. М. Аҡмулла;

d. З. Рәсүлев.

**23.** **«Шура» журналының баштан алып аҙағына тиклемге баш мөхәррире :**

a. **Р. Фәхретдин;**

b. М. Өмөтбаев;

c. З. Рәсүлев;

d. М. Аҡмулла.

**24. Троицктағы «Рәсүлиә»мәҙрәсәһенә нигеҙ һалыусы :**

a. Ғ. Соҡорой;

b. М. Аҡмулла;

c. **З. Рәсүлев;**

d. Ҡ. Ғәли.

**25. «Остаз Мирсалих Биксуринға» тигән шиғырҙың авторы :**

a. **М. Өмөтбаев;**

b. Р. Фәхретдин;

c. Ғ. Соҡорой;

d. С. Яҡшығолов.

**26. М. А6мулла 6ай8а тыуа?**

a. Ырымбур губерна3ы Өфө 2й18е Йомран-Табын ауылында;

b. Өф2 губерна3ы Б2р2 2й18е Т1тешле волосыны5 И4ке Со6ор ауылында;

c. **Ырымбур губерна3ы Б1л1б1й 2й18ене5 Ту63анбай ауылында**.

**27. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев башлан7ыс белемде 6ай8а ала?**

a. Ту63анбай ауылында;

b. **!н1с ауылында;**

c. Троицк 6ала3ында;

d. Буран7ол ауылында.

**28. М. А6мулла 6ай8а7ы м18р1с1л1р81 белем ала?**

a. Өфө, Ст1рлебаш;

b. Троицкий, Өфө;

c. Ырымбур, Ст1рлебаш;

d. **Ст1рлебаш, Троицкий.**

**29. М. А6мулланы5 ата3ыны5 исеме нисек була?**

a. М19лит;

b. 31йнулла;

c. **Камалетдин;**

d. Ш1к9р.

**30. М. А6мулла 6ай8а 9лтерел1?**

a. Йомран-Табын ауылында;

b. Ту63анбай ауылында;

c. **Ми1с 6ала3ы мен1н №ары4тан ауылы ара3ында**

d. Кисе9сат ауылында.

**31. М. А6мулла нинд1й т2рм1л1 4 йыл ултырып сы7а?**

a. **Троицкий т2рм13енд1;**

b. Б1л1б1й т2рм13енд1;

c. Сил1бе т2рм13енд1;

d. Ырымбур т2рм13енд1.

**32. М. А6мулла7а «А6мулла» 6ушаматын кем 6уш6ан?**

a. башҡорттар;

b. татарҙар;

c. **ҡаҙаҡтар;**

d. урыҫтар.

**33. М. Аҡмулла**

a. Силәбе;

**b. Миәс;**

c. Троицк;

d. Өфө.

**ҡалаһының мосолман зыяратында ерләнгән.**

**34. М. Аҡмулланың үҙе иҫән сағында сыҡҡан китабы ҡайһы ҡалала нәшер ителгән?**

a. Өфө;

b. Ҡазан;

c. Ырымбур;

d. Алматы.

**35. Йәш сағында М. Аҡмулланың нидәй суфый шағирҙан белем алғанлығы билдәле?**

a.  Ғəли Соҡоройҙан;

b. Һибəтулла Салиховтан;

c. Тажетдин Ялсығолдан;

d. **Шəмсетдин Зəкиҙəн.**

**36.  М. Аҡмулла ҡайһы ырыу башҡорто?**

**a.  Мең;**

b. Юрматы;

c. Үҫəргəн;

d. Табын.

**37. М. Аҡмулланың əҫəрҙəр йыйынтығы башҡорт телендə тəүге тапҡыр**

a.  1981 йылда;

b.  1991 йылда;

c. 2001 йылда;

d.  2011 йылда

**баҫылып сыҡты.**

**38. «Аҡмулла» операһының авторы?**

a.  Шамил Ҡолбарисов;

b.   Хөсəйен Əхмəтов;

c. Салауат Низаметдинов;

d.  **Заһир Исмəғилев.**

**39. М. Аҡмулла ижадын махсус өйрəнеүсе ғалимдар?**

a.  Əнүр Вəхитов, Ғайса Хөсəйенов;

b.  **Əхəт Вилданов, Рəшит Шəкүр;**

c.  Ғиниəт Ҡунафин, Мирас Иҙелбаев;

d.  Əхнəф Харисов, Ким Əхмəтйəнов.

**40. М. Аҡмулла исемендəге премия  нисəнсе йылда булдырыла?**

a.  **1981 йылда;**

b.  1985 йылда;

c.  1989 йылда;

d. 1993 йылда.

**41. М. Аҡмулла исемендәге премияның тәүге лауреаты?**

a. Әхнәф Харисов;

b. **Рәшит Шәкүр;**

c. Әхәт Вилданов;

d. Заһир Исмәғилев.

**42. «Киске Өфө» гәзитендә ҡайһы башҡорт мәғрифәтсеһенең нәсихәттәре даими баҫылып килә :**

a. М. Өмөтбаевтың;

b. М. Аҡмулланың;

c. **Р. Фәхретдиновтың;**

d. С. Яҡшоғоловтың.

**43. «Әфлисун араһында һин – бер кишер», - тип М. Аҡмулла кемде битәрләй?**

a. Бузыҡаев кантонды;

b. ҡаҙаҡ байын;

**c. үҙен**

d. атаһын.

**44. Туҡһанбайҙан сығып киткәс, Аҡмулла атаһына ҡайһы ҡаланан хат яҙа?**

a. Ҡазандан;

b. Ырымбурҙан;

c. Өфөнән;

d. Троицкиҙан.

**45. Аҡмулланың портретын эшләгән рәссам?**

a. Зилфәт Басыров;

b. Әхмәт Лотфуллин

c. Алексей Кузнецов;

d. Борис Домашников.

**46. Аҡмулла фекеренсә, кеше өсөн етенсе ҡиммәт нәмә?**

a. шөкөр;

b. ихлас;

c. сабыр;

d. иман.

**47. Наҙанлыҡты М. Аҡмулла нимәгә тиңләй?**

a. **аңра айыуға;**

b. яуыз бүрегә;

c. хәйләкәр төлкөгә;

d. ҡурҡаҡ ҡуянға.

**48. “Аҡмулла”операһының либреттоһын кем яҙған?**

a. **Ишмулла Дилмөхәмәтов;**

b. Ҡәҙим Аралбаев;

c. Рауил Бикбаев;

d. .Әсхәл Әхмәтҡужа.

**49. М. Аҡмулла исемен йөрөтә:**

a. Башҡорт дәүләт университеты;

b. Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры;

c. Башҡорт дәүләт филармонияһы;

d. **Башҡорт дәүләт педагогия университеты.**

**50. Аҡмулла музейы ҡайҙа урынлашҡан?**

a. Ҡырғыҙ Миәкәлә;

b. **Туҡһанбайҙа;**

c. Өфөлә;

d. Ырымбурҙа.

**51. Ризаитдин Фәхретдиновтың тыуған йылы :**

a. 1859;

b. 1831;

c. 1875;

d. 1833.

**54. М. Өмөтбаевтың «Бағсаһарай фонтаны» китабы ҡайҙа һәм ҡасан баҫыла?**

a. Өфө, 1903 йыл;

b. Ҡазан,1901 йыл;

c. Ырымбур, 1900 йыл.

**55. Өфөлә М. Аҡмулла педагогия іуниверситеты алдында ҡуйылған һәйкәлдең авторы:**

a. А. Ҡобағошов;

b. В. Дворник;

c. З. Басыров;

d. Р. Мөхәмәтшин.

**56.М. Аҡмулланың скульптор портретын ижад иткән рәссам:**

a. Зөлфәт Басыров;

b. Рәшит Нурмөхәмәтов;

c. Алексей Кухнецов;

d. Ҡасим Дәүләткилдиев.

**57. Мөфтөйлөк вазифаһын башҡарыусы башҡорт мәғрифәтсеһе:**

a. М. Аҡмулла;

b. М. Өмөтбаев;

c. С. Яҡшығолов;

d. Р. Фәхретдинов.

**58. М. Өмөтбаевтың «Халыҡ ижады өлгөләре» тигән бүлектә нимәләр бар?**

a. тарихи йырҙар;

b. эпостар;

c. легендалар, мәҡәлдәр.

**59. М. Аҡмулла исемендәге премия лауреаты?**

a. Мостай Кәрим;

b. Кирәй Мәргән;

c. Фәрит Иҫәнғолов;

d. Яныбай Хамматов.

60. **М. Аҡмулла ижад иткән «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!» әҫәренең тулы варианты Курган өлкәһе Яланҡатай районы Ғәйет ауылында Закир Шакиров тарафынан бер ҡулъяҙма китаптан күсереп алынған. Нисәнсе йылда?**

a. 1941 й.**;**

b. 1932 й.;

c. 1931 й.;

d. 1929 й.